# СИБАЙ ДӘҮЛӘТ ФИЛАРМОНИЯҺЫ:
## кисә һәм бөгөн



## Моңдарың күп һинең, йырҙарың күп...



Р.И.Ишмуллин

*Ирәндек буйҙары элек-электән үҙенең сәсәндәре, йырсылары, ҡурайсылары, бейеүселәре менән дан тотҡан. Мәшһүр «Буранбай», «Урал», «Зөлхизә», «Сибай», «Ғилмияза», «Төйәләҫ» кеүек йырҙар ошо ерлектә тыуып, быуындан быуынға күсеп, бөгөнгө көнгәсә килеп еткән. «Байыҡ», «Зарифа» кеүек дәртле бейеүҙәр өлгөһөндә әҙме йәштәр тәрбиәләнгән. Ә инде Ирәндек һырттарында үҫкән ҡурай быуын-быуын алмашынған күпме башҡорттоң моңдашына, юлдашына һәм көрәштәш-арҡадашына әүерелгән; бөгөн республикала дан тотҡан маһир ҡурайсылар, башлыса, башҡорттоң ете ырыуын һыйындырған ошо төбәктән сыҡҡан. Сығыштары менән ошо төбәккә ҡараған йыр-бейеүҙәргә тыуған ере, иле, халҡы менән ғорурланыу, илһөйәр рух, бейеклек һәм бөйөклөк хас, ә «Сәлимәкәй» кеүек мөхәббәт йырҙарына хистәрҙең нескәлеге, таҙалығы һәм камиллығы хас.*

*Бына ошо бай халыҡ ижадын артабан үҫтереү, балҡытыу һәм киләһе быуындарға еткереү маҡсатында Сибай дәүләт филармонияһы барлыҡҡа килде. Журналдың был һанында филармонияның директоры Ринат Искужа улы Ишмуллин менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.*

**— Ринат Исҡужович, Сибайҙа асылған филармонияның тәүге директоры булараҡ, һеҙгә был ижади коллективтың үҫеш юлы бөтә нескәлектәренә тиклем таныш. Әммә һәр үҫеш матди базанан башлана. Иң ҡыйыны — шуны яйға һалыу. Сибай филармонияһы миҫалында был мөһим этап нисек үтелде?**

— Филармония Сибай ҡала советы президиумы ҡарары менән 1993 йылдың 1 сентябрендә ойошторолған. Тәүге директоры — Фәтих Салауат улы Хөснөтдинов, художество етәксеһе итеп Әлмирә Шәриф ҡыҙы Ҡыуатова тәғәйенләнгән. Ошо ике кешенең һәм, әлбиттә, ул ваҡытта хакимиәт башлығы булып эшләгән Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтовтың даими хәстәрлеген баһалап бөткөһөҙ. Беҙ уларға һәр саҡ рәхмәтле. Мәҙәниәт министрлығы алдында профессиональ эстрада сәнғәтен үҫтереүсе мәҙәни усаҡ булырға тейешлеген иҫбатларға кәрәк ине, финанс сығымдарын һанап, ижади көстәрҙе туплау ҙа үтә ваҡ, мәшәҡәтле эш. Ләкин был усаҡ башҡорт сәнғәтенең киләсәге өсөн кәрәк ине, һәм ул тоҡанды.

**— Матди базанан ҡала һәр эштең уңышын — ә сәхнәгә килгәндә бигерәк тә — кадрҙар хәл итә. Сибай филармонияһының «тәүге ҡарлуғастары» кемдәр булды һәм нисек табылды?**

— Был ҙур мәсьәлә ине. Сентябрь айынан башлап артистар менән осрашыуҙар, һөйләшеүҙәр башлана. Бер һүҙ менән әйткәндә, кешеләрҙе Өфөнән Сибайға ҡайтырға, йә Баймаҡтан Сибайға күсергә күндерергә кәрәк була. Был эш уңышлы ғына килеп сыға. Тәүге ҡарлуғастар булып Гөлназ Аҡназарова, Айтуған Мәүлитҡолов, Азамат Тимеров, Сулпан Асҡарова, Айтуған Дәүләткирәев, Лилиә Ишемйәрова, Нәсимә Тимерова, Илшат Яхиндар килеп төшә. Филармонияның ижади башланғысы тап ошо исемдәргә бәйле. Сәнғәт училищеһының 4-се курс студенты, һәләтле йырсы Азамат Тимеровты Мәҙәниәт министрлығы Өфөлә ҡалдырырға теләй. Хәл-ваҡиғаларҙың беҙҙең файҙаға ыңғайлауы арҡаһында, шөкөр, Азамат хәҙер Башҡортостандың халыҡ артисы исеменә лайыҡ һәм Сибайҙа эшләүен дауам итә.

Бейеүселәр Сибайҙағы ”Гөлдәр” ансамбленән, Баймаҡтағы ”Ирәндек”тән, БДУ-ның ”Ирәндек” бейеү ансамбленән саҡырылды. Бөгөн инде атҡаҙанған артист исеменә лайыҡ булған талантлы балетмейстер Гөлназ Вәкил ҡыҙы Аҡназарова махсус әҙерлекле йәштәрҙе йыйҙы. Таланты һәм уҡырға теләге барҙарын Мәскәүҙә, Силәбелә, Өфөлә уҡытып алдыҡ.



А. Дәүләткирәев

Ул саҡта фатир мәсьәләһе иң ауыры ине, Зиннур Ғөбәйҙулла улы ярҙамы менән уныһы ла хәл ителде. Айтуған Дәүләткирәев, мәҫәлән, 18 йәшендә фатирлы булды.

Сибай филармонияһының рәсми асылыу тантанаһы 1994 йылдың ғинуар айында үтә.

”Моңдарын күп һинең, йырҙарың күп, әйҙә, йырла, башҡорт балаһы!..” тип аталған программа сценарийының авторы Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы Зөһрә Фәйзуллина, режиссеры Әлмирә Ҡыуатова булды. Әлбиттә, тамашасы уны бик йылы ҡабул итте. Яңы мәҙәни усаҡ асылыу ысын мәғәнәһендә тантанаға әйләнде.

**— Һәр яңы ижади юл үҙенән элек барлыҡҡа килгән тәжрибәгә таяныусан. Һеҙҙең осраҡта был өлгө ролен кем башҡарҙы?**

— Тарихи йыр-моңдарыбыҙ бишеге булған төбәк сәнғәте бик тә үҙенсәлекле булырға тейеш ине. Әлмирә Ҡыуатова иң элек тәжри-

бәһенән сығып эшләгәндер, һәм ул һәр саҡ төрлө идеяларға бай булыуы менән айырылып торҙо. Икенсенән, коллективҡа йәш көстәр күпләп килеүе, сәмләнеп эшкә бирелә алыуҙарынан да уңыш көтөп була ине. Унан һуң, беҙҙә гел ошо төбәктән сыҡҡан ауыл егеттәре һәм ҡыҙҙары эшләй. Ә был рухи яҡтан тарҡалмаған, бай хисле һәм милли үҙаңлы музыкант, йырсы, бейеүсе тигән һүҙ. Әлмирә Шәриф ҡыҙы: "Балтик буйы республикалары халҡында иҫ киткес үҙенсәлек бар. Йыр йә көйҙө башҡарыр алдынан уның килеп сығыу тарихын һөйләйҙәр, шунан башҡарып ишеттерәләр", — тигәйне. Беҙҙең халыҡ та борон-борондан шулай эшләгән. Шуға күрә беҙҙең концерт программаларыбыҙ ҙа тамашаға ҡоролған була. Форсат сыҡҡанда филармонияның тарихына ныҡлабыраҡ туҡталып үтке килә. 1994 йылдың апрель айында ҡала хакимиәте, Мәҙәниәт министрлығы һәм Башҡорт дәүләт филармонияһы Сибай филармонияһын ойоштороу тураһында килешеү төҙөй. Мин филармонияның директоры вазифаһына 1994 йылдың май айында тәғәйенләндем.

1995 йылдың 1 ғинуарынан Мәҙәниәт министрлығы приказы менән филармония БДФ-ның Сибай филиалы тип үҙгәрелде. Был инде эште күпкә еңеләйтте, сөнки беҙҙе тулыһынса республика финанслай башланы.

1997 йылда Октябрҙең 40 йыллығы исемендәге Башҡортостан баҡыр-көкөрт комбинатының мәҙәниәт йортон беҙгә бирҙеләр.

Башҡортостан Республикаһы Министрҙар Кабинетының 1998 йылдың 6 ғинуарында сыҡҡан ҡарары менән беҙ "Сибай дәүләт филармонияһы" тип атала башланыҡ.

**— Сибай филармонияһы сағыштырмаса тиҙ арала республикала танылыу яуланы, сит илдәрҙә лә ҡыйыу сығыштарығыҙ билдәле. Диңгеҙ аръяғындағы тамашасы һеҙҙе нисек ҡабул итә һәм был гастролдәр һеҙгә нимә бирә?**

— 1995 йылда Рәсәйҙә үткәрелгән ике халыҡ-ара фестивалдә ҡатнашып, филармония дипломант исемен яуланы: береһе — Силәбе өлкәһендә үткәрелгән Халыҡ-ара Бажов фестивале, икенсеһе — Белгород ҡалаһындағы Еңеүҙең 50 йыллығына бағышланған фестиваль. Ошо фестивалдәрҙән һуң беҙ сит илгә саҡырыу алып ҡайттыҡ һәм 1996 йылда Францияла бер-бер артлы үткәрелгән дүрт халыҡ-ара фестивалдә ҡатнаштыҡ. Европаның күҙенә бер эләккәс, йыл да саҡырыуҙар булһа ла, финанс наҡыҫлығы ҡамасаулай. Шулай ҙа 2001 йыл Грецияла башҡорт сәнғәтен күрһәтеп, үҙебеҙ ҙә башҡа ҡитғалар сәнғәте менән танышып ҡайттыҡ. Бындай аралашыуҙар "үҙ ҡаҙанында ҡайнауҙан" күпкә юғарыраҡ. Үҙ тамашасыбыҙға алып ҡайтҡан күстәнәстәребеҙ бик оҡшай. Шуныһы ҡыуаныслы: ҡайҙа ғына барһаҡ та сығыштарыбыҙҙы йылы ҡаршы алалар, алҡыштарға күмәләр.

Республиканан тыш, беҙ коллектив менән Татарстанда, Силәбе өлкәһенең Арғаяш, Ҡоншаҡ, Сосновка райондарында бер нисә тапҡыр, Пермь, Ырымбур өлкәләрендә, Үзбәкстанда һәм Ҡаҙағстанда гастролдәрҙә йөрөнөк. Йыш ҡына күрше Магнитогорск, Орск, Новотроицк, Гай ҡалаларында булабыҙ. Ундағы тамашасы беҙҙе ихлас ҡабул итә.

Һәр йылдың көҙөндә беҙ Өфөлә үҙебеҙҙең яңынан-яңы программаларыбыҙ менән баш ҡала тамашасылары алдында сығыш яһайбыҙ, эшебеҙгә үҙенсәлекле "отчет" бирәбеҙ. Әйткәндәй, тәүге йылдарҙы беҙ Өфөлә белгестәр алдында ысынлап та имтихан тота инек. Ғалимдар, вокалистар, бейеүселәр, программаларҙы ҡарап, тәнҡитләй, кәңәш бирә, өйрәткеләп тә ебәрә ине.

**— Бая әйткәнемсә, һәр ижад кешеһе йәки ижади коллектив, юлын ниндәй ҙә булһа өлгөгә таянып башлаһа ла, ҡанат нығытыу менән үҙ йөҙөн булдырыу**

**эшенә тотона. Сибай филармонияһының башҡаларға оҡшамаған, ҡабатланмаҫ һыҙаттары нимәлә?**

— Йәш коллективҡа сәм, үҙ милләте өсөн ғорурлыҡ, юғары кимәлгә ынтылыу хас. Шуғалырмы, филармонияның сығыштарында яһалмалылыҡ юҡ. Программалар үҙенсәлекле, эстәлекле һәм халыҡсан.

Сибайҙарҙың үҙ йөҙө булыуы Урал аръяғы райондарының ауыҙтел ижады өлгөләренә таяныуынан да килә. Күрше-тирә район халҡы менән осрашып һөйләшеү, өйрәнеү мөмкинселеге бар.

**— Үҙәктән алыҫ ятыу үҙен һиҙҙермәйме? Мәҙәниәт министрлығы менән мөнәсәбәт нисек?**

— Филармония асылғандан бирле Мәҙәниәт министрлығы үҙ хәстәрлегенән ҡалдырмай. Ирина Ишмөхәмәт ҡыҙы Мәхмүтованың, Фирүзә Иншар ҡыҙы Солтанбаеваларҙың кәңәштәре, ярҙамдары беҙгә һәр саҡ файҙалы.

Тағы ла шуны ла әйтергә кәрәк: беҙҙең коллектив төрлө режиссерҙар, бейеү һалыусылар менән хеҙмәттәшлек итә. Режиссерҙарҙан Байрас Ибраһимов, Римма Шакирова, Салауат Ишмөхәмәтов, Вәкил Йосопов, Салауат Итбаев, Татарстандан Ғәфүр Ҡәйүмдәр эшләне. Һәр береһе үҙ оҫталығының, йөрәгенең сатҡыһын биреп ҡалдырҙы.

Бейеүҙәрҙе Ф.Ғәскәров исемендәге Башҡорт академия бейеү ансамбленең художество етәксеһе Риф Ғәбитов, Ингуш дәүләт бейеү ансамбле етәксеһе Дикалу Музакаев, Валерий Степанов, Учалы ҡала филармонияһының художество етәксеһе Рәис Низаметдиновтар ҡуйҙы. Һәр автор бейеү ҡуя, йә тулы программа әҙерләй. Яугирлыҡты, ҡаһарман йөрәкле егеттәрҙе һынландырған чечен бейеүе еңел бирелмәй. Оҙаҡ эшләне йәштәр был һәм башҡа милләт бейеүҙәре өҫтөндә. ”Грек сюитаһы”н да кинәт кенә килтереп сығарманыҡ. Урын-еренә еткереү, әлбиттә, Гөлназ Вәкиловнаға төшә. Баһаһын халыҡ бирә.

**— Филармонияның концерт программаларында ерле фольклор традициялары ни дәрәжә ҡулланыла?**

— Был йәһәттән баянсыбыҙ Санъяр Мәүлетҡолов, ансамбльдең художество етәксеһе Гөлназ Аҡназарова, филармонияның әҙәби бүлек мөдире һәм фольклор буйынса консультанты Нәфисә Тулыбаевалар һәр саҡ эҙләнеү юлында. ”Ритайым-зилем-күләгә” программаһы бер кемде тыныс ҡалдырмай. Халыҡҡа ул шул тиклем үҙ, яҡын.

Ә ”Сыңрау торна” бейеүе, ”Киндер туҡмау”, ”Эх, ҡымыҙы, ҡымыҙы”, ”Һыу буйында”, ”Киске уйын” кеүек йор-шаян бейеүҙәр барыһы ла халыҡ күңеленә хуш килде.

**— Учалы филармонияһының бейеү ансамбле етәксеһе Рәис Низаметдинов: «Сибай филармонияһы минең өсөн бер кимәл, һәм был кимәлде бында Азамат Тимеров, Лилиә Ишемйәрова, Илшат Яхин һәм Гөлназ Аҡназаровалар тотоп тора. Хәлегеҙҙе аңлайым, һеҙгә еңелдән түгел» («Атайсал», № 78, 2001 й.), тигән һүҙҙе әйткән. Коллегағыҙҙың был хәүефе, моғайын, һуңғы ваҡытта Сибай филармонияһынан Сәғиҙулла Байегеттең, Әлмирә Ҡыуатованың, Сулпан Асҡарованың һәм инде Илшат Яхиндың Өфөгә китеүенә бәйлелер. Әйткәндәй, был юғалтыуҙарҙы филармония нисек кисерҙе?**

— Ғөмүмән әйткәндә, Сибай филармонияһы ниндәйҙер бер ҙур мәктәп булып тора. Беҙҙең коллективта эш башлап, күптәр ҡанат нығытты. Әйтәйек, Сәғиҙулла Байегет, Гөлсөм Бикбулатова, Фирүзә Париж, Илшат Яхин, Сулпан Асҡарова, Урал Мортазин, Йәмилә Бикбаева. Уларҙың һәр береһе беҙгә ҡәҙерле. Бөгөн уларҙың бөтәһе лә ижад донъяһында республиканы шаулата, һәр береһе үҙ юлын тапҡан. Ҡыуанырға ғына ҡала.

Әлмирә Шәриф ҡыҙының ғаилә хәле сәбәпле Өфөгә күсеүе беҙҙең өсөн үкенесле. Сер түгел, филармонияның ябылыуын, юҡҡа сығыуын көткән-



**байҙа профессиональ сәнғәттең йылдам үҫеше (Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Башҡорт дәүләт театры, дәүләт филармонияһы, «Сулпан» балалар театры) үҙешмәкәр сәнғәтте һәм башҡа район үҙәктәрендә, ҡалаларҙа әле лә йәшәгән һәм, әйтер инем, сәскә атҡан халыҡ театрын ҡыҫырыҡлап сығарғандай. Был күренешкә һеҙҙең ҡараш ниндәй?**

дәр ҙә етәрлек. Тик тормош дауам итә. Тәжрибәле режиссер Салауат Мостафа улы Итбаев менән миҙгел асҡанда үрҙә һаналған артистар ”өйҙә” ине. Бөтә төр хеҙмәттәге кеүек, сәнғәттә лә осоу һәм ергә төшөү осраҡтары була. Беҙҙең ана шул көрсөктө үткәргән осор булғандыр.

Әлбиттә, үҫтереп еткереп, осороп ебәреүе коллектив өсөн ауыр. Кемгәлер Өфөлә эшләргә кәрәк. Сибайҙа ҡалғандар китеүселәргә үпкә һаҡламай. Улар урынына яңылары килә. Бейеү ансамбленә махсус белемле егет-ҡыҙҙар килде, ең һыҙғанып эшкә тотондо улар. Йәш йырсыларҙан — республикаға әле үҙен танытасаҡ Баязит Байназаров, Рөстәм Хәсәновтарҙы әйтергә була. Төшөнкөлөккә бирелеп ултыра алмайбыҙ. Өфөләге үҙебеҙҙекеләр менән ижади бәйләнеште юғалтмайбыҙ.

**— Сибай филармонияһы, аңлауымса, Өфө сәнғәт училищеһының Сибай филиалы сығарған йәш һәләттәр иҫәбенә туплана. Был бик яҡшы һәм ваҡытында Сибай ҡалаһында бындай уҡыу йорто кәрәкмәй тигән ҡараштың хата булыуына ишара яһаған бер миҫал. Ләкин ниндәй генә профессиональ сәнғәт коллективы булмаһын, уны мәңге тере, мәңге тынмаҫ халыҡ ижады һәм шуның сағылышы булған үҙешмәкәр сәнғәттең иң баҙыҡтары профессиональ сәхнәгә күсә. Ә бына Сибайҙа профессиональ сәнғәттең йылдам үҫеше…**

— Эйе, һуңғы ике йыл Сибайҙағы сәнғәт училищеһынан белгестәр алабыҙ. Ике йырсыбыҙ унан, һәм тағы ла буласаҡтар әле. Беҙ барыбер халыҡ сәнғәтенән айырылмайбыҙ. Мәҫәлән, халыҡ йырын башҡарыу оҫталығына ололарҙы тыңламай өйрәнеп булмай. Бейеү элементтары ла шулай.

Эйе, Сибайҙа етмеш йыллыҡ биографияһы булған үҙенсәлекле драма театры, бына инде 8-се ижад миҙгелен япҡан филармония, республикала берҙән-бер йәп-йәш ”Сулпан” балалар театры бар. Ҡаланың мәҙәниәт бүлегендә, белеүемсә, халыҡ театрын тергеҙеү буйынса эштәр алып барыла. Ул театр-студия артабан балалар театрына әйләнгән. Бында хәҙер ысынлап та профессионалдар эшләй. Сибай хакимиәте ҡала үҙешмәкәр сәнғәт түңәрәктәрен бер халыҡ ижады йортона быйыл кире туплаңы. Йыр, бейеү, ҡурай, фольклор ансамблдәре эшләй.

**— Сибай ҡалаһында «Ирәндек мондары» йыр бәйгеһе үтә башлағас, ҡала халҡының ҡайһылыр бер өлөшө быны тарһынды. Әммә Президентыбыҙ Мортаза Рәхимовтың аңлауы һәм ул саҡтағы Сибай ҡалаһы хакимиәте башлығы Зиннур Йәрмөхәмәтовтың яҡлауы арҡаһында был бәйге сағыу традицияға әйләнде. Филармония коллективына Си-**

**байҙа быңдай бәйгенең үтеүе ни бирҙе?**

— ”Ирәндек моңдары”н беҙҙең элекке художество етәксебеҙ Әлмирә Ҡыуатова ҡала хакимиәтенә тәҡдим иткәйне. Уны хуплап күтәреп алдылар, тәрбиәүи әһәмиәте хаҡында һөйләйһе лә юҡ. Йыл да 16 йәшкә тиклемге 70-80 бала башҡорт халыҡ йырын өйрәнеп ярышҡа сыға. Ә йәштәр өсөн ул ылыҡтырыу, дәртләндереү сараһы. Нәсимә, Азамат Тимеровтар, Гөлсөм Бикбулатова, Сәғиҙулла Байегет, Баязит Байназаров, Вафа Мәүлитовтар ошо бәйге еңеүселәре. Филармонияға мәртәбә өҫтәй был исемдәр.

**— Әйткәндәй, филармония асылғаны бирле Сибайҙа хакимиәт башлыҡтары ике тапҡыр алышынып өлгөрҙө. Ижади коллектив яҙмышына был хәл кире йоғонто яһаманымы?**

— Сибайҙа беҙҙе үҙенең һөйөүе, хәстәрлеге менән тотоп килгән хакимиәт башлыҡтары эшләне һәм эшләй. Коллективтың бөтә тормошо менән улар таныш булды. Хәлдәребеҙҙе белеп, фатирҙар бирҙеләр, ярҙамдарынан ташламанылар. Билдәле булыуынса, филармония бинаһына реконструкция кәрәк — Рәил Сәлих улы Сарбаевта был йәһәттән яҡлау таптыҡ. Төҙөү-ремонт эштәрен ул үҙе контролдә тота. Илаһи моң донъяһы кешеләрен яҡламау үҙе үк гонаһ булыр ине. Шөкөр, тик рәхмәттәр, эштәренә уңыштар ғына теләп ҡалабыҙ барыһына ла.

Коллектив асылғандан бирле республикала ҙур ҡурсалау тапты. Белеүегеҙсә, үткән йыл Президентыбыҙ Мортаза Ғөбәйҙулла улы Рәхимов коллективҡа Урал аръяғы һабантуйында комфортабелле немец автобусы бүләк итте. Хөкүмәтебеҙ, Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығының ярҙамын һәр саҡ һиҙеп торабыҙ, коллектив тулыһынса республика бюджетынан финанслана.

Хәләф Хәлфетдин улы Ишморатов филармония асылғандан алып беҙҙе үҙ балаһы кеүек ҡурсалап, һәр ваҡыт ярҙам итеп тора, һәр бер артистың һулышынан аңлап тора, тип әйтер инем.

**— «Бөгөнгө ауыл» темаһы кемдәрҙәлер һағайыу, кемдәрҙәлер борсолоу тыуҙыра, кемделер уйға һала. Халыҡ ижадында моңдоң үлергә яҡҡан дейеүҙе лә терелтеү факты бар. Ошо йәһәттән Сибай филармонияһы, халыҡҡа бик яҡын торған ижади коллектив булараҡ, ниндәй программа тәҡдим итмәксе?**

— Бейеү ансамбленең, Азамат Тимеровтың яңы программалары халыҡҡа үтеп инерҙәй тамашалар булмаҡсы.

**— Ҡыҙыҡлы һәм йөкмәткеле яуаптарығыҙ өсөн рәхмәт, Ринат Исҡужович. Бөгөнгө көндә етәксе булып, етмәһә, үҙенсәлекле коллектив етәксеһе булып эшләү еңел түгел икәнен аңлайым. Һеҙгә һәм һеҙ етәкләгән коллективҡа Хыҙыр Ильяс гел юлдаш булһын, ә һеҙҙе ҡурсыусы Сибай ҡалаһы хакимиәтенә гел шулай йырмоңға битараф булмаған башлыҡтар насип итһен Хоҙай.**

*Таңсулпан Ғарипова әңгәмәләште.*

